**Ҡырмыҫҡалы районы Һәүәләй филиалының “Бәләкәс” Муниципаль автоном мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы Олокүл ауылының балалар баҡсаһы**

# Башҡорт фольклор байрамы сценарийы “Өй күтәреү һәм ҡотлау”

/өлкән-әҙерлек төркөмөндә /

Башҡарҙы: Камалова Р. Р. -
юғары квалификацион
категориялы тәрбиәсе

**Һәүәләй ауылы * 2022**

## Сценарий “Өй күтәреү һәм ҡотлау”

*/Талғын ғына көй ишетелә. Әбей- Ағинәй менән бабай- Аҡһаҡал инә./*

**А/һ:** Бөгөн өйгә нигеҙ һалып өй күтәрәләр йәштәр.

**А/и:** Әйе шул. Фатихабыҙҙы бирәйек. Ай афарин, өмәселәр ҙә йыйыла башланы.

*/Өмәселәр инә/*

**А/һ:**Әйҙәгеҙ әле Рәүил улым, Гөлназ ҡыҙым, йортоғоҙҙың урынын билдәләйек.

*/А/и епкә көмөш йөҙөк тағып өй урынын билдәләй: әгәр урын насар булһа йөҙөк бәүелә, яҡшы булһа - бәүелеүҙән туҡтаған ергә нигеҙ һалалар./*

**А/и**: Бына ошо ергә аҡ таш- нигеҙ ташы һалайыҡ. Быляҡшы урын өй һалыу өсөн.

**А/һ:** Әйҙәгеҙ өмәселәр, дәррәү эшкә тотоноғоҙ. Бөгөн эш күп.

*/Билдәренә балта ҡыҫтырған* ***өмәселәр бейеү башҡаралар/***

**А/һ:**Улым */Рәүилгә ҡарап/* бик изге эшкә тотонғанһығыҙ. Эшең уң, ҡул артың еңел булһын. Хәҙер буласаҡ өй урынында доға ҡылайыҡ.

*/ ДОҒА ҠЫЛҒАС, ХУЖАБИКӘ ХӘЙЕР ТАРАТА/.*

*/Өмәселәр ағас әҙерләйҙәр, юналар, әрсейҙәр, бысалар./*

**Рәүиль:** Урамдағы йәш буранан

Аҡ тәңкәләй тап оса

Ҡар яткансы өй һалайыҡ

Тартбысҡыңды, тарт ҡоҙа.

**1-се бала:** Был донъяла балта тотоп

Тыугандыр ул Линар

Таң атканда, көн батканда

Ҡулында балта була.

**2-се бала:** Балталарҙың туҡылдауын,

Бысҡыларҙың сыңлауын

Тормош музыкһы итеп

Тыңлайым мин тыңлайым.

**3-сө** бала: Беләгендә көсө таша

Йөрәгендә дәрт, сәме

Оҫҡон таптар йондоҙ ише

Ауыл күгенең йәме.

**А/и:** Йә, уландар, нигеҙҙең дүрт мөйөшөнә дүрт тәңкә һалайыҡ.

**1-се бала**: Донъя ҡотло булһын!

**2-се бала**: Эсенә тыныслыҡ булһын!

**3-сө** бала: Таҙалыҡ-иҫәнлек булһын!

**4-се бала**: Алла рәхмәте яуһын!

*/Ҡыҙҙар ҡулдарына ҡымыҙ ҡойолған туҫтаҡтар, һөлгөләр тотоп сығалар,* ***өмәселәрҙе һыйлайҙар- бейеү.****/*

*/Әбей - күрше инә./*

**Әбей:** “Өй һайлама, күрше һайла” тигән боронғолар. Мин һеҙҙең ут күршегеҙ булам.

**Хужабикә:** Рәхмәт, күрше инәй. Татыу ғүмер итергә яҙһын.

**Әбей:** Әйе шулай булһын. Амин!

**Бергә:** Амин!

**Әбей:** Тап-топто тапаһаң, ағас эйәһенең рәнйеүе төшә, тиҙәр ине боронғолар.

*/Әбей менән хужабикә тап йыя-йыя сығып китәләр/*

**А/һ:** Әйҙәгеҙ өрләк-өрләк күтәрәбеҙ.

*/Өй макеты керетелә. Хужабикә өрләк үтәреүселәргә май ҡаптыра, өрләк мөйөштәренә һөртөп, теләк теләй./*

**Хужабикә:** Эшегеҙ уң булһын,

Нигеҙебеҙ ныҡ булһын.

Ҡыуанып-шатланып

Ғүмер итергә булһын!

Рәхмәт, туғандар, ҙур ярҙам күрһәттегеҙ. Бына өй төҙөлөп тә бөттө.

**2-се күренеш**

*/Өй боронса матур итеп йыштырылған/*

*Ишек ҡағалар*

**А/и:** Был йорттарға инергәме?

Күтәрмәләре күркәм.

Ҡырып йыуған таҡтаһына,

Аяҡ баҫырға ҡурҡам.

**А/h:** Был йорттарға инергәме?

Тешләшмәйме бейәһе?

Бейәһенән бигерәк тә

Тешләшмәйме эйәһе?

**Хужабикә:** Әйҙүк, әйҙүк, ҡунаҡтар.

**Хужа:** Рәхим итегеҙ түрҙән.

*/Ҡул биреп һаулыҡ һорашалар. Ҡунаҡтар ултырышалар./*

**А/h:** Яңы өйгә буш ҡул менән килергә ярамай. Ҡустым беҙҙән һеҙгә бер һарыҡ.

**Хужа:** Рәхмәт, олатай. Имен-аман йәшәргә яҙһын.

**1- се ҡунаҡ:** Донъяның үҙ яйы бар,
Барлыҡ йәндең өйө бар,
Өйө барҙың һыйы бар
Йырлау өсөн көйө бар.
**2- се ҡунаҡ:** Хоҙай беҙгә йән биргән,
Йән биргәнгә юн биргән.
Рәхмәт беҙҙең туғанға,
Бик күркәм йорт төҙөгән.

**Бергә күмәкләп**: Йортта аш-һыу мул булһын,

Бала-сға ун булһын,
Йөҙҙәрегеҙ яҡты булһын,
Эштәрегеҙ уң булһын!
Амин!
**Хужабикә:** Эйе, рәхмәт.
**Хужа:** Рәхим итегеҙ, барыһынан да етешегеҙ.
/Күмәкләп **таҡмаҡтар йырлайҙар/**

Хужабикә: Туғандар, рәхмәт барығыҙға ла. Өй төҙөүҙә ҙур ярҙам күрһәттегеҙ.

